# Иртәлектәр өсөн шиғырҙар

## (Яҙ байрамы, еңеү көнө, сығарылыш кисәһе)

Йылмайҙылар бар ҡайындар
Ялбыратып сәстәрен
Шылтыратып алҡаларын
Ҡойоп ысыҡ-йәштәрен
Баҡсалағы ҡәнәферҙәр
Балҡып тора ысыҡтан
Дуҫтар бөгөн еңеү таңы
Тип әйтәләр шатлыҡтан.

Олатайым бик оло
Ул үткән һуғыш йылы
Йәш.көслө батыр
Ауыр яу ҡырын уҙған
Мин-ҡыйыу сая егет
Менермен толпар егеп
Елеп ҡошто уҙырмын
Мин-олатай улымын.

Дошман баҫып ингәс тә
Ҡол итмәк булып беҙҙе
Олатам киткән һуғышҡа
Һаҡларға тыуған илде
Ут ямғыры яуған күктән
Янған ауыл-ҡалалар

Азатлыҡ тип башын һалған

Бик күп ата-бабалар.

Олатайым батыр булған

Дошманды ҡыуған илдән

Фашистарҙы тар-мар иткән

Ҡайтҡан ул Еңеү менән.

Элеп ҡанат остарына

Яҙ килтерҙе ҡарғалар

Йырлап йырылды йылғалар

Шарламалар шар ҙа шар

Мүкле тауҙа тәпәй баҫты

Тәүге умырзаялар

Имәндәр йоҡоһон асты

Киреп ҡолас йәйәләр.

Милая певунья

Ласточка родная

К нам домой вернулась

Из чужого края

Под окошком вьется

С песенкой живою

“Я весну и солнце

Принесла с собою”.

Сыйрсығым ҡошсоғом

Хәҙер бында ҡыш түгел

Матурым һин кил инде

Өйөң өлгөрҙе бөгөн.

Тәҙрәләре уйылған

Ал-зәңгәргә буялған

Сыйырсығым һинең өсөн

Ҡуныр тал да ҡуйылған.

Оҙон муйынын һуҙып

Һөйөнсөләй ата ҡаҙ

Урамға сығығыҙ әле

Килде беҙгә яҙ,яҙ,яҙ.

Күр әле күр ҡарасы

Ҡыйыҡтан тама тамсы

Үҙе бәләкәс кенә

Үҙе көләкәс кенә

Тишкеләп бөттө ҡарҙы

Гөрләүеккә юл ярҙы

Ҡаңғылдашалар ҡаҙҙар

Башлана тиҙәр яҙҙар.

Сыйырсыҡ,сыйырсыҡ

Ояңдан осоп сыҡ

Оҡшаһа был өйөң

Түгелһен моң көйөң

Ҡошсоғом сыҡты ла

Ҡанатын ҡаҡты ла

Һоҡланды ояға

Таң ҡалды донъяға.

Беҙ бөгөн бик шатланышып

Йыйылғанбыҙ байрамға

Сөнки тиҙҙән мәктәпкә

Барасаҡбыҙ уҡырға

Бөгөн беҙҙә оло байрам

Баҡсаны тамамлайбыҙ

Бик теләһәктә бында

Бүтәнсә ҡала алмайбыҙ

Һүҙ бирәбеҙ һиңә Ватан

Уҡырбыҙ дүрткә,бишкә

Ең һыҙғанып тотонорбоҙ

Һин ҡушҡан һәр бер эшкә.

Мең-мең рәхмәттәр әйтәбеҙ

Апайҙар бөтәгеҙгә

Һеҙҙе бер ҙә онотмабыҙ

Һаулыҡ теләйбеҙ һеҙгә.

Гел изге уйҙарығыҙ

Арыу белмәй ҡулдарығыҙ

Көн буйына эшләйһегеҙ

Яҡты булһын таңдарығыҙ.

Айырылышыу мәле етте

Беҙ инде хәҙер ҙурҙар

Һеҙгә беҙ ҡунаҡҡа ғына

Килербеҙ инде апайҙар.

Һәр көн иртән шатланышып

Ашығабыҙ дәрескә

Беҙ мәктәпкә күмәкләшеп

Барасаҡбыҙ уҡырға.

Алығыҙ һеҙ бүләк итеп

Сәскәләрҙең тере бәйләмен

Ҡаршылағыҙ тағы бик күп йылдар

Татып матур тормош йәмен.

Милые сотрудники Вас мы не забудем

И долго благодарны за заботу будем

Уж час прощаться близко-близко

Мы до земли поклонимся вам низко.

С любовью мы ходили в детский сад

Не год,ни два а много лет подряд

И здесь нас все сотрудники любили

Оберегли,многому учили.

Ты нас принял малышами

Детский сад,наш дорогой

Мы теперь большими стали

И прощаемся с тобой.

Бала сағым бәхетле сак

Баксала гөрләп үтте

Мин үҫтем инде,ҙур үҫтем

Хушлашыр вакыт етте.

Этот праздник-день прощанья

Грустный и веселый

Детский сад наш-до свиданья

Здравствуй,здравствуй школа.

Йәйге эҫе көндәрҙә лә

Буран булған сакта ла

Әсәй иртүк эшкә барҙы

Беҙ йөрөнөк баксала.

Һинән алған илһам шишмәләре

Көндәлек тормошта бик кәрәк

Күңелдәрҙе нурлы,моңло иткән

Кәңәш тәкдимдәрең ҙур терәк.

Нисәнсе кат ошо ишек алды

Йыя инде осар кошторын

Фатихаһын биреп сәләмләй ул

Киләсәккә атлар дуҫтарын.

Рәхәт түгел тәрбиәсе булыу

Атай-әсәй юҡта янымда

Һинән өлгө,наҙ һәм илһам алам

Һағынып уянам таңдарҙа.

Иң тәүге нәфис сәскәләр

Тик һеҙҙең өсөн үҫкән

Яҙғы моңдар,таңғы нурҙар

Шул сәскәләргә күскән.

Тәрбиәсенән дә бөйөгөрәк

Бармы ҡәҙерле исем

Шуға ла һеҙҙең байрам

Байрам бөтәбеҙ өсөн.

Юлдаш булһын аҡ бәхеттәр

Аяҙ булһын күгебеҙ

Беҙҙең сәскә шәлкемдәре

Булһын рәхмәт һүҙебеҙ

Тормош юлдарын үткәндә

Һеҙ булырһығыҙ көҙгөбеҙ.

Кескәйҙән үк ҡабул иттең

Баҡсам мине-дуҫ иттең

Хушлашабыҙ һинең менән

Хәҙер инде ҙур үҫтек.

Бик ҡыйын да,ҡыуаныста

Һеҙҙән айырылышыуы

Үҙемдең тәрбиәселәремә

Рәхмәтемдең иң ҙуры

Тәрбиәсем тоғро дуҫым

Йән аҙығы бирҙе ул

Белем сере баҡсаһында

Шытымдарға һибә ул.

Өйрәтә ул яратырға

Тыуған илде,хеҙмәтте

Айырырға аҡ-ҡараны

Булырға ла әҙәпле.

Бөтә уйынсыҡтарымды

Ҡустыма бүләк итәм

Мин өлкән бит инде хәҙер

Бөгөн мәктәпкә китәм.

Беҙ бөгөн бик шатланышып

Йыйылғанбыҙ байрамға

Сөнки тиҙҙән мәктәпкә

Барасаҡбыҙ уҡырға.

Йырлы айҙар,йырлы йылдар

Хәтеремдә ҡаласаҡ

Һау бул баҡсам,һау булып тор

Гөрләүекле баласаҡ.

Тел төҙәтеүсе апайҙар

Һеҙгә рәхмәттең ҙуры

Һеҙҙән алған белемдәрҙе

Онотмам ғүмер буйы.

Бәхетле бала саҡ өсөн

Һеҙгә рәхмәт әйтәбеҙ

Рәхмәтебеҙ менән бергә

Сәскә бүләк итәбеҙ.

До свиданья детский сад

Отчего же все грустят

Ждут нас парты в школе новой

И звонок зовет ребят.

Воспитателям своим

Мы спасибо говорим

Вы для нас как мамы были

Расставаться не хотим.

## Мәҡәлдәр:

- белеме барҙың ҡәҙере бар.
- Уҡыуҙың сиге юҡ.
- Белем аҡыл асҡысы.
- Белмәү ғәйеп түгел,белергә  тырышмау ғәйеп.
- Белгәнгә яҡты-белмәгәнгә ҡараңғы.

- Уҡығандың теле икәү.
- Белемле бер әйтер,бер әйтһә лә тура әйтер.
- Белемле бер әйтер,белемһеҙ мең әйтер.

## Йырҙар.

### Весна пришла.

Тук-тук-тук-тук-кто стучится в дверь
Кап-кап-кап-кап-капает капель
Слышишь к нам весна спешит
Капля капельке поет.
Чип-чип-чип-чип-жаворонок поет
Значит скоро к нам весна придет
Вербы же надеть хотят
Серебристый свой наряд.

### Яҙ килә.

Ҡарҙар ирей,һыу таша
Талдар бөрөһөн аса.
Их,күңелле яҙ килә
Ҡояш нурҙарын һибә

Шау-шыу шатлыҡ һәр ерҙә
Яҙ көндәрендә беҙҙә.

Сыйырсыҡтарҙа ҡайта
Көн яҡтан беҙҙең яҡҡа.

## Яҙғы тамсылар.

Ҡояш көлөп ҡарай беҙгә
Күҙҙәр сағыла
Йылғаларҙан боҙҙар аға
Диңгеҙ артына.
Яҙ,яҙ етә
Тәҙерәне астылар
Тып-тып-тып-тып-тып итә
Эре-эре тамсылар.
Ағасҡа ҡунып сыпсыҡтар
Сырылдашалар
Йәшкелт-ҡара сыйырсыҡтар
Эй йырлашалар.

## Мәңгелек ут.

Батырҙар һәйкәле
Мәңгелек ут яна
Шул һәйкәл янында
Кешеләр тын ҡала.

Батырҙар һәйкәле
Граниттан һалынған
Ә уға алтындан
Исемдәр яҙылған.

Исемдәр бер заман
Һалдаттар инеләр
Тыуған илде һаҡлап
Уттарға инделәр.

## Олатайым миҙалдары.

Олатайым миҙалдары
Сыңғылдап сың-сың сыңлай
Мин тыңлайым шул сыңдарҙы
Һеңлемдә сыңды тыңлай.
Сың-сың сыңлайҙар
Беҙ еңдек тип йырлайҙар.
Олатайым оло яуҙа

Ауыр юлдарҙы үткән
Еңеүсе олатайымды
Тыуған яҡтары көткән.

## Беҙ бергә.

Беҙ бергә-бергә
Бей-бейеп китәбеҙ
Бейек күктәргә лә
Бейеп етәбеҙ.

Дуҫтар бергәләп
Йыр йырлап торабыҙ
Күңелле уйындар
Бергә ҡорабыҙ.

Булсы дуҫлыҡта
Биҙәр ул ер шарын
Белһендәр кешеләр
Тоғро дуҫ барын.

## Тиҙҙән мәктәпкә.(общий йыр)

Беҙ тиҙҙән мәктәпкә
Барабыҙ,барабыҙ
Өр-яңы китаптар
Алабыҙ-алабыҙ.
Эй,ҡояш нурыңды
Йәлләмә беҙҙән
Беҙгә бит мәктәпкә
Барырға тиҙҙән.
Өйрәнербеҙ тиҙҙән
Уҡырға яҙырға
Һандарҙы бүлергә
Ҡушырға,алырға.

Беҙ һәр саҡ теләйбеҙ
Уҡырға бишлегә
Донъяның бар серен
Тиҙерәк белергә.

## Мәктәпкә барғым килә.(Мила)

Көн һайын мәктәпкә бара
Күрше ҡыҙы Рәмилә
Китаптары ла бар унын
Буяу ҡәләмдәре лә.

Әсәйем бирсе мәктәпкә
Уҡырмын бары бишкә
Туғанымды ла ҡарармын
Өлгөрөрмен бар эшкә.

Баҡсалағы сәскәләргә
Һыуҙар һибәм күберәк
Сәскәләр тотоп мәктәпкә
Барғым килә тиҙерәк.

## Һау бул баҡсам.(Общий йыр)

Балалар баҡсаһы менән
Беҙ бөгөн хушлашабыҙ
Тәрбиәселәр менән дә
хәҙер айырылышабыҙ
    Һау бул балалар баҡсаһы
    Һау бул,һау бул хуш инде
    Беҙҙең урынға тағы ла
    Кескәйҙәр килер инде.
Уҡырға ла ваҡыт етте
Ғүмер тиҙ үтә икән
Һеҙҙең менән айырылышыу
Бик ауыр ауыр икән.

Һөйләшә лә белмәй инек
Һиңә тәү килгән саҡта
Хәҙер бына йыр йырлайбыҙ
Уйланып һинең хаҡта.

## Тәрбиәсемә.(Общий йыр)

Иркен балалар баҡсаһы
Бәләкәй генә дәүләт
Тәрбиәсе апайыбыҙ
Ҡарай беҙҙе әпәүләп
    Яйлап мәктәпкә әҙерләй
    Беренсегә барырға
    Беҙҙең икенсе әсәй ул

Рәхмәтебеҙ ҙур уға.
Тәрбиәсе апайыбыҙ
Гел генә беҙҙең янда
Матур үтә көндәребеҙ
Тәрбиәсе булғанға

Тыңлаһаҡ,тыңламаһаҡ та
Апай беҙҙе ярата
Ҡыҙыҡ әкиәттәр һөйләп
Ауыҙына ҡарата.

## Школьная полька.(не надо)

Просыпаться по утрам,
по утрам,по утрам
В школу с книжками ходить
Хочеться и нам.
И расти,расти,расти
Надо нам старательно
Чтобы нас в первый класс
Взяли обязательно.
Мы научимся писать
И считать,и читать
И задачи будем мы
Правильно решать.

## Хушлашыу йыры(Общий йыр)

Күңелле йәшәнек бергә
Балалар баҡсаһында
Хәҙер инде айырылабыҙ
Төрлөбеҙ төрлө яҡҡа.
Һау бул,һау бул баҡсабыҙ
Беҙ һине онотмабыҙ.
Уйынсыҡтарҙа моңайып
Ултыралар мөйөштә
Һау булығыҙ уйынсыҡтар
Беҙ китәбеҙ мәктәпкә.

Рәхмәт бөтәһе өсөн дә
Рәхмәт барығыҙға ла
Онотмабыҙ баҡсабыҙҙы
Юлдар айырылһа ла.

## Апайҙарға рәхмәт(Общий йыр)

Апайҙар ҙур рәхмәт
Әйтәбеҙ бөтәбеҙ
Иртәгә күбебеҙ
Мәктәпкә китәбеҙ.

Һәр кемгә булдығыҙ
Яғымлы һөйкөмлө
Тәрбиә бирҙегеҙ
Әсәйҙәр шиелле.

Өйрәндек бергәләп
Бейергә йырларға
Балҡығыҙ күңелдә
Бик оҙаҡ йылдарға.

## Таҡмаҡтар.(Общий йыр)

Әйәнәбеҙ,әйләнәбеҙ
Әйләнәбеҙ күмәкләп.
Уйнайбыҙ ҙа йырлайбыҙ ҙа
Бейейбеҙ ҙә бергәләп.

Тыпыр-тыпыр бейегәндә
Бергә баҫырға кәрәк.
Бергә баҫып бейегәндә
Талпынып тора йөрәк.

## Детский сад.(Общий йыр)

Мы привыкли в детстве каждый день
Приходить в любимый детский садик
Просыпатся рано утром лень
Что же тут поделать если надо.
Разбегуться утром кто куда
Старшая сестра и папа с мамой
В школу на работу  даже бабушка и та
Мчиться по делам своим упрямым.
    Но а мы спешим сюда
    В детский садик наш любимый
    Самый светлый и всегда
    Самый лучший и неповторимый.
Взрослые нас за руки возьмут
И пойдем мы вместе утром ранним
Здесь нас любят здесь всегда нас ждут
Наши воспитатели и няни.
Если завтра скажут мне опять

Отдахни сегодня воскресенье
Буду я по садику любимому скучать
Непременно всем на удивленье.
Хорошо спешит с утра
Позабыв про не погоду
Любят очень детвора
Детский сад в любое время года.

## Прощальная.(Общий йыр)

Детский садик нас встречает
Здесь играем и поем
Время быстро пролетает
Мы еще быстрей ростем
Здесь нас любят и ласкают
Здесь уютно нам тепло
Много сказок нам читают
Детям здесь полным-полно.

Воспитатели иняни
Мы вас любим от души
Озорные и смешные
Шолунишки малыши
Мы спасибо говорим вам
От родителей от нас
Не хотелось уходить нам
Но зовет наш школьный класс.

Детский садик до свиданья
Милый садик помни нас
Вот настало растованье
Мы уходим в первый класс
Встретит нас учитель в школе
Скажут здесь ваш дом родной
Тут мы вспомним по неволе
Детский садик дорогой.